Бөрйән районы муниципаль район Советы рәйесенең һәм Советының 2014 йылдағы эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре тураһында Совет рәйесенең йыллыҡ отчеты.

**Хөрмәтле Рөстәм Динислам улы!**
**Хөрмәтле депутаттар, район етәкселәре!**

Бөрйән районы муниципаль районы Уставының 19 статьяһына ярашлы Бөрйән районы муниципаль район 3 саҡырылыш Советының 2014 йылға эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт тәҡдим итәм.

Отчет осоронда Бөрйән районы муниципаль район Советы үҙ эшмәкәрлеген Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияларына, №131-се «Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидараны ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында» Федераль законға, Бөрйән районы муниципаль район Уставына һәм планға нигеҙләнеп ойошторҙо.

Совет ултырышы регламентка һәм планға ярашлы үткәрелеп депутаттарҙың ҡатнашыу кимәле уртаса 84 процент тәшкил итте. Үткән йылда Совет ултырышын кисектереп тороу осрактары булманы. Ләкин сәбәпһеҙ ултырышта ҡатнашмаған депутаттар булды. 2014 йылда өсөнсө саҡырылыш Советы тарафынан - 11 ултырыш үткәрелеп, 74 һорау Совет ултырышына сығарылып раҫланды. Ҡарарҙар сығарыу башланғысы тәртибендә, район Советы рәисе тарафынан -31, район хакимиәте башлығы тарафынан-36, депутаттар тарафынан-3, конкурс комиссияһы тарафынан -1 ҡарар проекты индерелде. Иктисад, һалым һәм

уларҙы йыйыу буйынса -17, транспорт, торлаҡ-коммуналь хужалығы буйынса-3, шулай уҡ мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәтте үҫтереү, халыҡты социаль яҡлау тураһында 14 ҡарар ҡабул ителде. Отчет осоронда Совет район Уставы нормаларын, ҡабул ителгән Положениелар, тәртиптәрҙе һәм башҡа ҡарарҙарҙың, район бюджеты, шулай уҡ, урындағы үҙидара органдары һәм вазифалы кешеләрҙең урындағы әһәмиәткә эйә булған мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүе буйынса эшмәкәрлеген контролдә тотоуға йүнәлтелде. Ошо йәһәттән Совет ултырышында 7 мәсьәлә ҡаралды. Атап әйткәндә, район Советы рәйесе һәм хакимиәте башлығының 2013 йылғы эшмәкәрлеге тураһындағы отчеты; бюджет үтәлеше, хоҡуҡ һаҡлау органдарының эш һөҙөмтәләре; демографик хәл, ауыл биләмәләре башлыҡтарының "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидараны ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында"ғы ФЗ-ның 14-се статьяһы үтәлеше хаҡындағы мәғлүмәте; район Советы депутаттарының үҙ вәкәләттәрен үтәүе һ.б.

2014 йылда 11 Президиум ултырышы үткәрелеп киләһе ултырыштарҙың көн тәртибе раҫланып, Совет ултырышына сығарыласаҡ һорауҙар ентекләп ҡаралды. Шулай уҡ президиум ултырышында төрлө өлкәләрҙә фиҙәкәр хеҙмәте менән алдынғылыҡты бирмәгән хеҙмәткәрҙәрҙе маҡтау ҡағыҙына тәҡдим ителде. Йыл эсендә Совет рәисе тарафынан 18 ҡарар, 152 бойороҡ ҡабул ителде. Әлбиттә, Советтың эшмәкәрлегендә ҡарарҙар ҡабул ителеүе, күрһәтмәләр бирелеүе, ултырыштар үткәрелеүе төп

күрһәткес түгел, ә уларҙың законға ярашлы булыуы һәм район халҡы мәнфәғәтен яҡлауы мөһим. Муниципаль район Советы эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлеше норматив –хоҡуҡи базаны камиллаштырыу һәм артабан үҫтереү. Муниципаль район Советы ҡарарҙарына талаптар юғары килеш ҡала: ҡарарҙар Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына, Федераль закондарға һәм Башҡортостан Республикаһы закондарына, район Уставына ярашлы булырға тейеш. Район Советы вәкәләтле орган тарафынан элек ҡабул ителгән норматив акттарҙың актуаллегенә һәм ғәмәлдәге закондарға ярашлылығына әленән-әле мониторинг үткәрә. Һөҙөмтәлә, айырым акттар үҙ көсөн юғалтҡан, улар ғәмәлдән сыҡҡан тип табыла йәки үҙгәрештәр индерелә.

Советтың эш һөҙөмтәһе депутаттарҙың даими комиссияларының эффектлы эшмәкәрлегенән тора. Совет ултырышына сығарыласаҡ һорауҙар даими комиссияларҙа, район хакимиәте башлығы урынбаҫарҙары, хакимиәт белгестәре ҡатнашлығында уҙғарыла. Йыл дауамында даими комиссиялар тарафынан 7 ултырыш үткәрелеп 28 һорау ҡаралһа, шул иҫәптән бюджет, һалым, милек, эшҡыуарлыҡ буйынса даими комиссия- рәйесе Йомағолов Гәрәй Миңлеғәле улы- 3 ултырыш үткәреп 17 һорау, социаль –гуманитар мәсьәләләр, хоҡуҡ һаҡлау һәм башҡа хеҙмәттәр буйынса даими комиссия тарафынан - рәйесе Юлсурин Таһир Йәноҙаҡ улы- 4 ултырыш үткәрелеп 11 һорау Совет ҡарамағына сығарылды.

Советтың регламентын, депутат статусы һәм этикаһын үтәү буйынса комиссия Совет регламентының үтәлешен, депутат статусы, депутаттар тарафынан депутат бурыстарын үтәлешен ҡарай. Ултырышҡа сығарылған һорауҙар депутаттарҙың тәкдимдәре иҫәпкә алынып төҙәтмәләр менән индерелде. Урындағы үҙидара мәсьәләләрен хәл итеүҙә граждандарҙың туранан-тура ҡатнашыуын тәьмин итеүҙәге конституцион хоҡуктарын яклау маҡсатында 3 йәмәғәт тыңлауҙары үтте. Муниципаль район уставына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индереү; Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районының 2015 йылдарға һәм 2016-2017 планлы осорона бюджеты, республика тарихи-археологик һәм ландшафт-спелологик музейының тарихи - мәҙәни терәк планы буйынса үтте.

Ҡануниәттәргә ярашлы Советта ҡабул ителгән һәр ҡарар район гәзите биттәрендә яктыртылды, йә иһә район Администрацияһының рәсми сайтына урынлаштырылды. Регламентка ярашлы Совет ултырышының көн тәртибенә индереләсәк һорауҙары депутаттарҙың электрон адрестарына ебәрелеп торолдо. Ләкин бөтә депутаттарҙың электрон адрестары юҡ. Хөрмәтле депутаттар, электрон адрестарығыҙҙы булдырыу кәрәк.

Муниципаль район Советының район прокуратураһы, "Башҡортостан Республикаһының "Муниципаль берәмектәр Советы” Ассоциацияһы, республиканың мировой судьялар эшмәкәрлеген ойоштороу һәм хоҡуҡи акттар регистрын алып

барыу буйынса идаралыҡ менән тығыҙ бәйләнештә эшләүе хоҡуҡи акттарҙа хаталар булдырмауҙа һәм ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы итеп эшләүҙә ныҡлы ярҙам итә.
2014 йылда ҡарарҙар проекты буйынса район прокуратураһынан нигеҙҙә ыңғай һөҙөмтәләр алдыҡ. Шуға күрә лә 2014 йылда Советтың ҡарарҙарына протестар булманы. 131-се Федераль Законға үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр инеү менән бәйле Бөрйән районы муниципаль район Уставына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индерегә кәрәк булды. Шулай уҡ 16- норматив хоҡуҡи акт Юстиция министрлығында эксперт йомғаҡлау үтте.

Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районы Уставына ярашлы Советының вәкәләттәренең береһе район бюджетын раҫлау, уның үтәлешен контролдә тотоу һәм бюджеткә үҙгәрештәр индереү тора. Үткән 2014 йылда ла «2015 йыл һәм 2016-2017 йылдар планлы осорға район бюджеты" үҙ ваҡытында ҡабул ителде. 2014 йылда бюджет өлкәһендә 10 һорау ҡаралһа, бер тапҡыр – 2013 йылдың бюджеттың үтәлеше, 9 - тапҡыр 2014 йылдың бюджетына үҙгәрештәр индерелде.

Үткән 2014 йылда ла район Советы ауыл биләмәләре менән тығыҙ бәйләнештә эшләне. Ауыл биләмәләре башлыҡтарына методик һәм хоҡуҡи ярҙам күрһәтеү маҡсатында кәңәшмәләр үткәрелде. Талҡаҫ санаторияһы базаһында ауыл хакимиәттәренең эштәр менән идара итеүселәренә аҙналыҡ уҡыуҙар ойошторолдо, Ҡыпсаҡ ауыл биләмәһендә күсмә кәңәшмә үткәрелде. 2014 йылда район Советының ике тапҡыр Тимер һәм Киекбай ауыл

биләмәләрендә күсмә ултырышы үтте. Күсмә ултырыш ике өлөштән тороп: тәүге өлөшөндә депутаттар 131 Федераль закондың 14 статьяһының ауыл биләмәләренә үтәлешен ҡараһалар, пленар өлөшөндә ауыл биләмәләре башлыҡтарының эшмәкәрлектәре буйынса отчеттары тыңланылды. Район Советы депутаттары тарафынан Тимер ауылы биләмәһе башлығы Рәйсә Кинйәғәле ҡыҙы һәм Киекбай ауыл биләмәһе башлығы Илшат Ғаяз улының эшмәкәрлегенә ыңғай баһа бирелде. Күсмә ултырыштарҙа ике район Советы депутатының үҙҙәренең һайлау округтарында эшмәкәрлектәре буйынса отчеттары тыңланылды. Артабан да был эште дауам итербеҙ тип уйлайым.

**Хөрмәтле депутаттар!**

Бер нисә һүҙ районды ң сәйәси тормошо тураһында.

Белеүегеҙсә, 2014 йылдың 14 сентябрендә Башҡортостан Президентына һайлауҙар үтте. Үткән һайлауҙарҙа район һайлаусылары юғары әүҙемлек күрһәтте. Уларҙа тауыш биреү хоҡуғына эйә булған граждандарҙың 87 проценттан артығы ҡатнашты. Тауыш биреү һөҙөмтәләре район халҡының күпселегенең тотороҡлолоҡ курсын дауам итеү яҡлы булыуын раҫланы. Дөйөм алғанда, һайлау кампанияһы осоронда ниндәйҙер ҡағиҙә боҙоуҙар булманы.

Киләһе йыл айырыуса мөһим ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар менән иҫтәлекле.

2015 йылдың 13 сентябрендә урындағы ауыл Советтарына депутаттар һайлаясакбыҙ. Һайлауҙар яңыртылған закондар буйынса үтәсәк. Был ваҡытта 99 депутат мандаты алмаштырылырға тейеш. Халыҡҡа иң яҡын торған идара органдарының береһе булғанға күрә, ауыл Советтары ла йәмәғәтселеккә яҡшы таныш, тәрән фекерле, абруйлы депутаттарҙан тупланырға тейеш. Лайыҡлы депутаттар корпусы булғанда ғына урындағы үҙидаралыҡтың уңышлы эшләгәнен тормош үҙе үк раҫлай. Шулай уҡ Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын, районыбыҙҙың 85 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәкбеҙ.

**Хөрмәтле депутаттар!**

Советтың эш һөҙөмтәһе, уның халыҡ алдындағы абруйы һәр депутаттың Советтағы ғына эшмәкәрлегендә түгел, ә үҙҙәренең һайлау округында эшмәкәрлектәрендә сағыла. Уҙған йылда ла депутаттар үҙҙәренең һаулау округтарында ғына түгел дөйөм район тормошонда төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә әүҙем эшмәкәрлек алып барҙылар. Депутаттарҙың барыһы ла тиерлек үҙ округтарында ҡабул итеүҙәр үткәрә. 2014 йылда депутаттарға барлығы 117 һайлаусы мөрәжәғәт иткән. Беҙгә һайлау округына ингән ауылдарҙың урындағы үҙидара органдары менән эште тағы ла әүҙемләштерергә кәрәк. Өлгөрөп еткән киҫкен мәсьәләләрҙе берҙәм тырышлыҡ менән хәл итеп буласаҡ. Муниципаль район Советы депутаттарының ауыл биләмәһе Советы ултырыштарында ҡатнашыуы бик урынлы. Был биләмәнең проблемаларын төплө аңларға, уларҙы хәл итеү

юлдарын эҙләргә ярҙам итә. Ошонда үҙ округтарындағы һайлаусылар менән әүҙем эшләгән, теге йәки был сараны үткәреүҙә ярҙам иткән Совет депутаттарының исем-шәрифтәрен атап үтке килә. Депутаттар Г.Йомағолов, Т.Юлсурин, Н.Ғәбитов Р.Рахманғолов, И.Утәбаев Совет ултырышына даими эшлекле тәкдимдәр индерһә, депутат М.Йәримов тарафынан депутат запростар ебәреү райондың көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеүгә булышлыҡ итә. Шулай уҡ депутаттар К.Шәрипов, Ғ.Юлдашев, И.Йәнбирҙин үҙ округтарында үткәрелгән сараларҙа даими ярҙам итеп торалар.

Бөрйән районы муниципаль район Советының үткән йылғы эшмәкәрелегенә йомғаҡ яһап Совет үҙенә алған бурысын тормошҡа ашыра алды тип әйтергә мөмкин. Депутат корпусының төп бурсысы-халыҡ мәнфәғәтендә хеҙмәт итеү. Беҙҙең алда бик яуаплы бурыстарҙың иң мөһиме - социаль, иҡтисади мәсьәләләрҙе халыҡ ихтыяжында хәл итеү, һайлаусыларҙың ышанысын аҡлау.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.